**АЛЛА БИРҺӘ**

Алла бирһә тип башла һәр эшеңде.
Алла бирһә тип өйрәт һин үҙеңде.
Алла бирһә телеңдән шул төшмәһен.
Алла бирһә тоҙһоҙ һүҙҙе белмәһен.

Алла бирһә юлға сыҡһа юламан.
Алла бирһә кисер мине Һин Аллам.
Алла бирһә йәннәт ишеген асыр.
Алла бирһә яманлыҡ һинән ҡасыр.

Алла бирһә күңелгә сафлыҡ килер,
Алла бирһә ни була Тәңрем белер.
Алла бирһә тәүбә килһәм кисерер,
Алла бирһә йөрәккә Рухын бирер.

Алла бирһә киләсәгем Алланан.
Алла бирһә көс, ғәйрәт алам Унан.
Алла бирһә доға йорто булдырыр.
Алла бирһә иманлылар күп булыр.

Алла бирһә нәпсене беҙ тыяйыҡ,
Алла бирһә ялҡаулыҡты ҡуяйыҡ.
Алла бирһә эсеүҙән тыйылайыҡ.
Алла бирһә гелән булайыҡ айыҡ.

Алла бирһә тартыуҙан арынайыҡ.
Алла бирһә наркотик ҡулланмайыҡ.
Алла бирһә тәүфиҡҡа юл асайыҡ,
Алла бирһә самагонды ҡоймайыҡ.

Алла бирһә яманлыҡҡа бармайыҡ.
Алла бирһә иманға беҙ ҡайтайыҡ.
Алла бирһә доға йортон асайыҡ.
Алла бирһә Алланан беҙ тыуайыҡ.

Алла бирһә иманың булыр юлдаш.
Алла бирһә иретер йөрәктә таш.
Алла бирһә Алла Һүҙен Хоҙайын.
Алла биргән яҡты Ҡойашын Айын.

Алла бирһә һиңә Рухи яҡтылыҡ
Алла бирһә бирер иманлыҡ. Һаулыҡ.
Алла бирһә тотам бөгөн ураҙа,
Алла бирһә тәнемә булһын яза.

Алла бирһә тәнем ҡалыр ул балсыҡ,
Алла бирһә ожмах ишеге асыҡ.
Алла биргән мең быуынға мәрхәмәт.
Алла биргән Бөйөк Хоҙайға рәхмәт.